# МБУ СТЕРЛИБАШЕВСКИЙ «РДК» ФИЛИАЛ ЕЛИМБЕТОВСКИЙ СЕЛЬСКИЙ ДОМ КУЛЬТУРЫ

ГОД РОССИЙСКОГО

КИНО 2016

РӘСӘЙ КИНОҺЫ ЙЫЛЫ

2016

ГОД РОССИЙСКОГО КИНО

ЛО Поисково-исследовательский отряд
"ГВОЗДИКА"
Руководитель
Кидрячев Гайнетдин Сарваретдинович.




За трудовые
награжден медалью "Ветеран
Умер в 1973 году.
Ящик от пулеметной ленты (русская)


Йортто тоткан - ир,
өйзә тоткан - катын
Татыу булһа катынның, ары торһон алтының.
Өйзөң йәме бала менән.
Атаны күреп ул үсер, әсәне күреп кыҙ үсер.
НЕ ЗАБЫ
Из Сарайсинского сельского совета на войну ушел 441 человек.
Вернулись с победой 240 человек.
Погибло - 201 человек.
Низкий поклон и вечная память павшим за Родину нашим землякам.


1941-
1945
Они вернулись с Победой!
Хасанов
Сафа Хузямович,
Герой Советского Союза
Илькин
Зариф Закирович
Муллагулов
Рамазан Юмагулович
Файзуллин
Сайфулла Тареевич
Кумешбаев
Худайбирде Гайсович
Файзуллин
Минибаев
Дер. Уметбаево, Сарайсинский сельсовет
РЕЙХСТАГКА
БАЙРАҠ ЭЛГӘНДӘР!
ИСЕМДӘРЕН ДАНҒА
КҮМГӘНДӘР!
Никто не забыт,
Ничто не забыто...






Яугирҙарҙың
данлы эҙенән




победителю!

# Любительское объединение «ГВОЗДИКА»

С 2011 года при сельском доме культуры функционирует поисково-исследовательский отряд. Деятельность данного ЛО направлена на поиск и захоронение останков участников – пропавших без вести во время ВОВ, а также на поиск исторических данных (о селах, людях), древних захоронений. Здесь занимаются ребята от 12 лет. В состав отряда входит и старшая группа – это волонтеры, жители Сарайсинского сельского поселения в возрасте до 73 лет. Руководит отрядом Кидрячев Гайнетдин. Каждый год в определенное время (лето, июнь) выезжают в г. Псков для участия в слете поисковых бригад России. Все мероприятия осуществляются за счет личных средств руководителя и местных источников.



В 2011 году в Елимбетовском СДК было создано любительское объединение поисково-исследовательский отряд с одноименным названием «Гвоздика», которое переняло свое название от поисково -исследовательской организации «Гвоздика» Невельского района Псковской области. В 2014 Кидрячеву Гайнетдину Сарваретдиновичу году присвоено почетное звание члена комиссии этой организации.


ИРКУТСК


MASTERS


Rh+


GARRETT
AT















**Помните!**
**Через века, через года –**
**помните!**
**О тех, кто уже не придет никогда, –**
**Помните!**
**Какою ценою завоевано счастье, –**
**заклинаю, –**
**Помните!**

**(Р. Рождественский)**










ВЕЧНАЯ СЛАВА ГЕРОЯМ


ВЕЧНАЯ СЛАВА ГЕРОЯМ




















ПОДВИГ СОВЕТСКОГО



Һуғыш шаңдауы

# Яҡташыбыҙ 70 йыл хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә була

Күптән түгел электрон почта аша гәзит редакцияһына Псков өлкәһе Великие Луки ҡалаһының “Новый день” гәзите хәбәрсеһе К.Завистовскийҙан хат килде.

Унда Псков өлкәһенең көньяғында Невельский районында Самозваново ауылы янында эҙәрмәндәрҙең дүрт һуғышсы-ҡыҙылармеецтың мәйеттәре ҡалдыҡтарын табыуҙары тураһында хәбәр ителә. Яндарында шәхси әйберҙәре - фляжкалары, ҡашыҡтары, иң мөһиме - медальондары була. Һалдаттарҙы шәхси әйберҙәре менән ерләмәгәнгә, улар ерләнмәгән тип фаразларға тулы нигеҙ бар. Ихтимал, мина йәки снаряд шартлауынан ергә күмелеп ҡалғандарҙыр. Һуңынан ҡыҙылармеецтар хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегенә индерелгән тип һығымта яһарға мөмкин. Табылған медальондар һәм амуниция фрагменттары һуғышсыларҙың 1941 йылда уҡ һәләк булыуҙарының, тимәк, 22-се армияла хеҙмәт итеүҙәренең дәлиле.

Телефон аша эҙәрмәндәрҙән К.Завистовский алған мәғлүмәттәр буйынса, медальондарҙың береһендә “Губай” исемен, фамилияһының “Кид...” тип башланыуын һәм атаһының исемен “Хайбулиевич” тип уҡырға мөмкин. Ауыл Советының исеме “Сарайсинский” тип һәм ауыл исеменең “Эле...” йәки “Еле...” тип башланыуы асыҡ уҡыла. Артабанғы өс хәрефте “мба...”, йә булмаһа “мха...” тип уҡырға мөмкин. Хәбәрсе һуңынан Интернетта Һарайса ауыл Советында Йәлембәт ауылы булыуы тураһында мәғлүмәттәр таба. Шулай уҡ ОБД “Мемориал” сайтында ул Башҡорт АССРы Стәрлебаш районы хәрби комиссариаты тарафынан хеҙмәткә саҡырылған, 22-се армияның 170-се уҡсы дивизияһында хеҙмәт иткән һәм 1941 йылдың 22 июне - 1 сентябре араһында хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнгән 1912 йылғы Ҡыҙрасов Ғөбәй Хәйбулла улы тураһында мәғлүмәттәр таба. Ә унда табылған башҡа яугир яҙмалары мәғлүмәттәренән билдәле булғанса, улар 1941 йылдың 10 июленән һуң һәләк булалар. Ошо факттарҙы иҫәпкә алып, хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнгән, һәләк булған дүрт яугирҙең береһе яҡташыбыҙ Ғөбәй Хәйбулла улы Ҡыҙрасов тип раҫларға мөмкин.

Башҡа өс яугир ҙә 22-се армияла хеҙмәт иткән, дөрөҫ, төрлө дивизияларҙа - Петр Григорьевич Горин (Көнгәр районы), Александр Иванович Хозяинов (Көнгәр ҡалаһы) һәм Александр Степанович Рабков (Рябков) (Удмурт АССРы Бемыжск районы).

К.Завистовский хатында, “Гвоздика” эҙләнеү отряды етәксеһе И.П.Михайлов биргән мәғлүмәт буйынса, яугирҙәрҙең мәйеттәре ҡалдыҡтарын яңынан ерләүҙең ошо йылдың августа урталары - аҙағына билдәләнеүен хәбәр итә. Был эш менән Иван Петрович үҙе шөғөлләнәсәк, ҡыҙылармеецтарҙың табылған медальондары әлегә унда һаҡлана.




Ғөбәй Ҡыҙрасовтың медальоны эсендә һаҡланған ҡағыҙ



Ғөбәй Ҡыҙрасовтың медальоны эсендә һаҡланған ҡағыҙ

***

Асыҡланыуынса, Йәлембәт ауылында, ысынлап та, Ғөбәй Хәйбулла улы Ҡыҙрасов йәшәгән, Совет Армияһы сафтарына саҡырылған һәм 1941 йылда хәбәрһеҙ юғалған. Уның Шәрифъямал, Әхәт, Шәмсиямал, Миңләхмәт исемле дүрт бер туғаны була. Хәҙер улар иҫән түгелдәр. Йәлембәттә уларҙың балалары - Ғөбәй Хәйбулла улының туғандары йәшәй. Шәрифъямалдың улы - Ғәйнетдин Ҡыҙрасов Йәлембәт урта мәктәбендә физкультура уҡытыусыһы. Әхәттең улдары - Фәрғәт һәм Әхмәт Хәйбуллиндар икеһе лә төньяҡта вахта ысулында эшләйҙәр. Һарайса ауыл Советы ауыл биләмәһе хакимиәтенең эштәр менән идара итеүсеһе Р.М.Бүләкова хәбәр итеүенсә, Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы август айында Псков өлкәһенә барып, бабаһының мәйете ҡалдыҡтарын яңынан ерләүҙә ҡатнашырға ниәтләй, мөмкинлектәре булһа, Фәрғәт Әхәт улы һәм Әхмәт Әхәт улы ла уның менән барасаҡтар.

Бына шулай, 70 йылға яҡын ваҡыт уҙғас, Ватаныбыҙҙы фашист илбаҫарҙарынан яҡлап, яҡты киләсәгебеҙ хаҡына яуҙа һәләк булған тағы ла бер яҡташыбыҙҙың яҙмышы мәғлүм булды.

*Мәҡәләне Елена ХӘЛИУЛЛИНА әҙерләне.*

Һуғыш шаңдауы

# Тыуған иле була, тыуған йылы була, Үлгән йылы булмай батырҙың

**Псков өлкәһе Невельский районында 25 совет һалдатының, шулар араһында яҡташыбыҙ, Йәлембәт ауылынан Ғөбәй Хәйбулла улы Ҡыҙрасовтың мәйеттәре ҡалдыҡтары яңынан ерләнгән.**

Уҙған йылдың майында Псков өлкәһе Великие Луки ҡалаһының «Новый день» гәзите хәбәрсеһе К.Завистовский беҙҙең редакция менән элемтәгә инеп, Невельский районында Самозваново ауылы янында (бөгөн исеме генә ҡалған) ҡан ҡойғос һуғыштар булған урында Коми Республикаһынан эҙәрмәндәрҙең дүрт һуғышсы-ҡыҙылармеецтың мәйеттәре ҡалдыҡтарын табыуҙары тураһында хәбәр итте. Яндарында шәхси әйберҙәре - фляжкалары, ҡашыҡтары, медальондары була. Табылған медальондар буйынса һәләк булғандарҙың береһе яҡташыбыҙ Ғөбәй Хәйбулла улы Ҡыҙрасов тип раҫларға мөмкин.

Бына шулай, етмеш йылдан һуң Ҡыҙрасовтарға ата-әсәләренән ишетеп кенә белгән, ҡәберенә сәскә һала, батырлығы менән ғорурлана алмаған Ғөбәй бабайҙарының яҙмышы билдәле була. Үткән йылдың авгусында Ғөбәй Ҡыҙрасовтың бер туғанының улы, әлеге ваҡытта ғаиләһе менән Йәлембәт ауылында йәшәгән, мәктәптә физкультура уҡытыусыһы булып эшләгән Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы Ҡыҙрасов кейәүе Рафаэль менән бабаһы батырҙарса һәләк булған төбәккә барҙы.

- Невельский районының Турки-Перевоз ауылындағы туғандар ҡәберлегенә төрлө йылдарҙа эҙләнеү отрядтары яу яландарында тапҡан 1740 һалдат ерләнгән. Унда йәнә 25



*Ғөбәй Ҡыҙрасовтың шәхси әйберҙәре туғанына тапшырыла*

һалдаттың мәйеттәре ҡалдыҡтары ер ҡуйынына тапшырылды, шуларҙан алтыһының, шул иҫәптә бабайымдың

**Беҙҙең белешмә**

**Ғөбәй Хәйбулла улы Ҡыҙрасов 1912 йылда тыуа. Табылды ауылында ете класс тамамлай. Фин һуғышында ҡатнаша. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Башҡорт АССРы Стәрлебаш районы хәрби комиссариаты тарафынан 22-се армияның 170-се уҡсы дивизияһына хеҙмәткә саҡырыла. 1941 йылдың йәйенән ошо көнгәсә хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнә. Һалдаттарҙың береһендә табылған яҙманан мәғлүм булыуынса (күрәһең, ебәреп өлгөрмәгән), улар 1941 йылдың 10 июленән һуң һәләк булалар... Ҡыҙрасовтың тылда ҡалған ҡатыны һәм ике балаһы дәһшәтле һуғыш йылдарында аслыҡтан үлә...**

да исеме билдәле булды, - тип һөйләй Ғәйнетдин Ҡыҙрасов.

- Псков өлкәһенә барғанда күңелемә төрлө уйҙар килде. Әлбиттә, эҙләнеү эштәре алып барылыу һөҙөмтәһендә күптәрҙең яҡындарын табыуын, уларҙың яҙмышы тураһында белеүен ишеткәнем бар ине, әммә етмеш йыл уҙғандан һуң был хәл мөғжизә булып тойолдо, - тине ул тулҡынланып.

Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы бабаһы ҡәберенең тыуған ауылында булыуын теләһә лә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мөмкин түгел...

- Ғөбәй бабайыбыҙ сит-ят яҡтарҙа ҡалһа ла, ҡәҙер-хөрмәтләп ерләнде, - тип дауам итте ул. - Хәҙер инде уның «юғалмауын», ә Еңеү хаҡына ғүмерен ҡорбан итеп, яуҙа һәләк булыуын беләбеҙ.

Ғәйнетдин Ҡыҙрасов һәм уның ғаиләһе бабалары ерләнгән урынға барып ҡайтырға матди һәм әхлаҡи ярҙам күрһәткәндәре өсөн район етәкселегенә, «Күндерәк» хужалығы рәйесе М.З.Бүләковҡа, Һарайса ауыл Советы ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы А.С.Хәсәновҡа, туғандары И.Ғ.Ҡыҙрасов, Г.З.Әминева, Ә.Ә.Хәйбуллин, Ф.Ә.Хәйбуллин, Р.Р.Сөләймәновҡа ҙур рәхмәт белдерә.

Илдә һуғыш еле ҡағылмаған ғаилә юҡтыр, моғайын. Хәбәрһеҙ юғалған ирҙәрен ҡатындар, атайҙарын - балалар нисә йылдар көткән, һәр кем яҡын кешеһе быҙабына ҡайтып инер тип өмөт иткән.

Ғәйнетдин Ҡыҙрасов эҙәрмәндәргә сикһеҙ рәхмәтле. «Ә яу яландарында ятып ҡалған күпме һалдаттың исеме билдәһеҙ?» - тип уйлана ул. Эҙләнеү эштәренең мөһимлеген, Ватан өсөн һәләк булғандар алдындағы бурысыбыҙҙы аңлауҙан уның күңеле тынғы тапмай, шуға ла башҡа хәбәрһеҙ юғалған һалдаттарҙы эҙләүгә үҙ өлөшөн индереү өсөн ял ваҡытында бабаһының мәйете ҡалдыҡтарын тапҡан эҙләнеү отрядына ҡушылырға ниәтләй.

*Гөлназ ЙОМАДИЛОВА.*

*Фото ғаилә альбомынан.*

*Баҫылғанға кире ҡайтып*

# Хәтер иҫәндәргә кәрәк

**Август башында район гәзитендә «Тыуған иле була, тыуған йылы була, үлгән йылы булмай батырҙың» тигән мәҡәлә баҫылғайны. Унда Йәлембәт ауылынан Ғәйнетдин Ҡыҙрасов ғаиләһенең Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға 66 йыл үткәндән һуң 1941 йылда хәбәрһеҙ юғалған бабайҙары Ғөбәй Ҡыҙрасовтың яҙмышы тураһында белеүе хаҡында һөйләнелә. Былтыр Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы Псков өлкәһе Невельский районының Турки-Перевоз ауылында бабаһының мәйете ҡалдыҡтарын ерләүҙә ҡатнаша.**

Ватан өсөн һәләк булған яугирҙәр алдында бурысын аңлау, эҙләнеү эштәре менән шөғөлләнеүселәргә ихтирам һәм теләктәшлек Ғәйнетдин Ҡыҙрасовты битараф ҡалдырмай. Ул һуғышта хәбәрһеҙ юғалған һалдаттарҙы эҙләүгә үҙ өлөшөн индерә алыуы тураһында күп уйлана. Шуға ла ошо йылдың июлендә Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы ҡабат Турки-Перевоз ауылына бара, тик был юлы ирекле эҙәрмән сифатында. Уның менән бергә ҡыҙы Зилә, шулай уҡ Йәлембәт мәктәбе уҡыусылары Дамир Әбделмәнов (9 класс) һәм Альберт Латипов (10 класс) юлға сығалар.

- Был ялымды оҙаҡ онота алмамдыр, - тип һөйләне Ғәйнетдин Ҡыҙрасов Невелдән ҡайтҡандан һуң редакцияға килгәс. - Ата-бабаларыбыҙ ауыр һуғышта Ватан алдында хәрби бурысын намыҫ менән үтәгән, уларҙың батырлығы тураһында иҫтәлек мәңгегә хәтерҙә. Бик күп йылдар үткәс, беҙҙең ғаиләгә яҡыныбыҙ яҙмышын белеү шатлығын кисерергә тура килде. Һәләк булған яугирҙәрҙең береһенең генә исеме асыҡланһа ла, тыныс тормошобоҙ өсөн көрәшкәндәр алдында үҙ бурысымды аҙ ғына булһа ла үтәнем тип иҫәпләр инем, - ти Ҡыҙрасов.

Невелдә уларҙы урындағы эҙәрмән Иван Михайлов ҡаршылай. Эҙләнеү эше уның тормош мәғәнәһенә әүерелгән. Буш ваҡытын ул Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында хәбәрһеҙ юғалған һалдаттарҙы эҙләүгә бағышлай.



Ғ.Ҡыҙрасов командаһы тапҡан һуғыш снарядтары

Ғәйнетдин Ҡыҙрасов үҙенең командаһы менән Турки-Перевоз ауылынан ун саҡрым алыҫлыҡта палаткала йәшәй, шунда уҡ ҡаҙыу эштәре алып баралар.

- Ер ярсыҡ, шартламаған артиллерия снарядтары, патрондар, штыктар, каскалар менән тулған. Былар - ҡасандыр бында аяуһыҙ һуғыштар барыуы, ҡан ҡойолоуы шаһиты. Ҡайтып китер алдынан ғына кеше һөйәктәре таптыҡ. Уларҙы кемдеке икәнлеген асыҡлау өсөн И.Михайловҡа тапшырҙыҡ, - тип һөйләй Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы.

- Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һалдаттарҙың күбеһе исемһеҙ ерләнгән, сөнки һәләк булғандарҙың барыһының да үҙҙәре менән документы булмай. Быйыл эҙәрмәндәр тағы ла 64 яугирҙең мәйете ҡалдыҡтарын тапҡан. Күп йылдарҙан һуң улар ҡәҙер-хөрмәтләп туғандары ҡатнашлығында август аҙағында ер ҡуйынына тапшырыласаҡ, - тине Ҡыҙрасов.

- Ҡайтҡанда улар Беларусь



Ғәйнетдин Ҡыҙрасов эҙләнеү эштәре ваҡытында

Республикаһының Городок ҡалаһында булып, уның иҫтәлекле урындарын күргәндәр, башҡа халыҡ мәҙәниәте менән танышҡандар. Ғәйнетдин Ҡыҙрасов менән барған уҡыусылар ҙа сәфәрҙән ҡәнәғәт, бик күп тәьҫораттар алып ҡайтҡан.

- Хәтер үлгәндәргә түгел, иҫәндәргә, айырыуса йәш быуынға кәрәк, - ти Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы. - Улар һуғыш ҡурҡыныcын, афәтен күрмәһен ине.

***Гөлназ ЙОМАДИЛОВА.***

***Ғ.ҠЫҘРАСОВ фотолары.***



Патриотик тәрбиә

# Һуғыш шаңдауы

***Йәлембәт ауылында йәшәүсе яҡташыбыҙ Ғәйнетдин Ҡыҙрасов изге эш – Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған һалдаттарҙың мәйет ҡалдыҡтарын эҙләү һәм яңынан ерләү менән шөғөлләнә.***

Ул үҙған йыл ҡыҙы Зилә һәм Йәлембәт урта мәктәбенең бер нисә уҡыусыһы менән эҙләнеү эштәре барған Псков өлкәһенең Невельский районында булып ҡайта. Быйыл йәй улар йәнә эҙәрмәндәр сафына ҡушылған. Ғ.Ҡыҙрасов редакцияға килеп, ошо хаҡта һөйләне.

- Ошо йәй Псков өлкәһенең Невельский районында 10 августан 20 августа тиклем «Хәтер вахтаһы» үтте һәм беҙ (мин, ҡыҙым Зилә, ейәнсәрҙәрем Гүзәлиә Исхаҡова һәм Лилиә Сөләймәнова) унда ҡатнашырға булдыҡ. Үткән йылдағы маршрут беҙгә яҡшы таныш ине.

Беҙҙе урындағы эҙәрмәндәр төркөмө етәксеһе Иван Петрович Михайлов ҡаршыланы һәм Коми Республикаһы төркөмө менән бергә Аҡ күл буйындағы палаткалар ҡаласығына урынлаштырҙы. Беҙ һуғышта һәләк булғандарҙың мәйет ҡалдыҡтарын эҙләү һәм яңынан ерләү менән шөғөлләндек. Барлығы 49 һалдат мәйете ҡалдығы табылды һәм уларҙы яңынан ерләгәндә йәнә берәүһенең - илленсеһенең ҡалдығына тап булдыҡ. Уларҙың һөйәктәре Невельский районының Новохаванск ауылындағы һәйкәл янына ерләнде.

Бынан тыш ҡаҙыу эштәре урынында күп кенә һуғыш кәрәк-яраҡтары (миналар, снарядтар, патрондар) табыла. Улар араһында хатта ат арбаһы ла була, күрәһең, бомбаға эләккән.

- «Хәтер вахтаһы»нда әүҙем ҡатнашҡан, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү эштәренә өлөш индергән өсөн ейәнсәрҙәрем Маҡтау грамоталары менән бүләкләнде. Улар ошондай кәрәкле һәм файҙалы эшкә үҙ өлөшөн индергәне өсөн ҙур ғорурлыҡ кисерҙе һәм киләһе йылда ла килергә уйланы. Тыныс тормош, илебеҙ азатлығы һәм Еңеү өсөн һуғыш яланында һәләк булғандарҙың исемдәре онотолорға тейеш түгел. Уларҙың батырлығы, ватансылығы һәм ҡаһарманлығы үлемһеҙ. Балаларымдың һәм ейәнсәрҙәремдең ошоно яҡшы аңлауы һөйөнөслө.

Беҙ «Хәтер вахтаһы»нда ҡатнашыуҙа аҡсалата ярҙам күрһәткәне өсөн район хакимиәте башлығы Ф.З.Туҡтаровҡа рәхмәт белдерәбеҙ.

*«Хәтер вахтаһы»нда ҡатнашыусыларҙы бүләкләү*

***Рәйсә МУСИНА яҙып алды.***
***Ғ.ҠЫҘРАСОВ фотолары.***

**Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына ҡарата**

# Һәр һалдат исемен үлемһеҙ итерлек



*Йөҙҙән ашыу һалдат ҡәҙер-хөрмәтләп ерләнде*

***Һәр кем ялын, отпускыһын үҙенсә үткәрә, берәүҙәр диңгеҙ ярында ҡояшта ҡыҙына, ҡайһылары баҡсала булыша, башҡалар ремонт эшләй... Ә Йәлембәт ауылынан Ғәйнетдин Ҡыҙрасов бына инде дүртенсе йыл рәттән отпускыһын Псков өлкәһендә үткәрә. Бында ул Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған һалдаттарҙың мәйете ҡалдыҡтарын эҙләүҙә ҡатнаша. Хәтер үлгәндәргә түгел, ә иҫәндәргә кәрәк. Һуғыш яландарында һәләк булған һәр яугирҙең исеме асыҡланып, улар ҡәҙер-хөрмәтләп ер ҡуйынына тапшырылғандан һуң ғына тыныс тормошобоҙ өсөн көрәшкәндәр алдында бурысыбыҙ үтәлер, тип иҫәпләй Ҡыҙрасов.***

**Рәйсә МУСИНА.**
**Ғ.ҠЫҘРАСОВ фотолары.**

Ирекле эҙәрмән был изге эш өсөн ваҡытын да, аҡсаһын да йәлләмәй, үҙ машинаһында эҙләнеү урынына тиклем бара. Тәү тапҡыр Невельский районының «Эҙәрмәндәр» отряды саҡырыуы буйынса ошо төбәктә һәләк булған бабаһының мәйете ҡалдыҡтарын ҡәҙер-хөрмәтләп ерләүҙә ҡатнашыу өсөн юллана. Күргән-кисергәндәр уның күңеленә бик көслө тәьҫир итә, шул ваҡыттан бирле Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы тормошон эҙләнеү



*Ғәйнетдин Ҡыҙрасов ейәнсәрҙәре менән*

эшенән башҡа күҙ алдына ла килтермәй, ул йәшәү мәғәнәһенә әүерелә.

Башҡаларҙы ла ошо изге һәм сауаплы эшкә ылыҡтырған ул. Быйыл ейәнсәрҙәре Лилиә һәм Гүзәлиә лә эҙәрмәндәр отрядына ҡушылып хәбәрһеҙ юғалған һалдаттарҙың исемен асыҡлауға үҙ өлөшөн индергән. Улар менән барған 107-се һөнәрселек училищеһы курсанты Рауил Батыршиндың да был сәфәрҙән алған тәьҫораттары ғүмере буйына һаҡланыр, моғайын.

- Август айында, Турки-Перевоз ауылы янында ике аҙна эшләгәндә, беҙ 115 яугирҙең мәйете ҡалдыҡтарын таптыҡ. Шуларҙың береһе - Башҡортостандан Федор Корнилов. Уның карателдәргә ҡаршы яуҙа ҡатнашып, 1941 йылда хәбәрһеҙ юғалыуы һәм хәрби хеҙмәткә 1940 йылда Йәрмәкәй район хәрби комиссариаты тарафынан саҡырылыуы тураһында мәғлүмәт асыҡланды, - тип һөйләне сәфәрҙең ҡайһы бер мәлдәре тураһында Ғ.Ҡыҙрасов.

Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, эҙләнеү эше 1941 йылда ҡан ҡойғос алыштар барған урындарҙың береһендә йәйелдерелгән. Уның барышында блиндаж, баҙ өйҙәр һәм һәләк булған һалдаттарҙың һөйәктәре табылған.

- Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яугирҙәрҙең күбеһе исемһеҙ ерләнгән, медальоны булғандар юҡ тиерлек, - тине ҙур үкенес менән әңгәмәсем. - Ә ул һуғышҡа ебәрелгән һәр һалдаттың төп документы булған.

Яҡташтарыбыҙ ике аҙна дауамында палаткаларҙа йәшәй, ашарға ла үҙҙәре әҙерләй. Уларҙан тыш, эҙләнеү төркөмөндә Коми Республикаһынан 18 кадет һәм Татарстандан бер ғаилә була.

Был сәфәрендә Ғәйнетдин Сәрүәретдин улына тантаналы рәүештә эҙәрмән исеме бирелеп, тейешле таныҡлыҡ тапшырыла. Хәҙер ул Невельский районында теркәлгән «Ҡәнәфер» эҙләнеү ойошмаһы ағзаһы.

- Беҙҙең республикала ла ошондай уҡ ойошма бар икән. Сәфәрҙән ҡайтҡас мин бер нисә тапҡыр унда шылтыратып, күргәндәрем тураһында һөйләһәм дә, был мәғлүмәткә иғтибар ҙа итмәнеләр тиһәм, хата булмаҫ. Ә ошондай таныҡлыҡты үҙебеҙҙә алырға ла мөмкин булған бит, - тип ғәжәпләнде Ғ.Ҡыҙрасов һәм артабан дауам итте. - Беҙ ҡайтыр алдынан һуғыш яугирҙәрен ҡәҙер-хөрмәт менән ер ҡуйынына тапшырыу сараһы үтте. Был тантанаға Псковтан һалдаттар килде, урындағы дин әһелдәре Ватаныбыҙ алдында хәрби бурысын намыҫ менән үтәп, ҡаһарманлыҡ һәм ҡыйыулыҡ күрһәткән яугирҙәр рухына ғибәҙәт ҡылды. Һалдаттарҙың ҡәберенә мәрмәр таштар ҡуйылды. Өс тапҡыр мылтыҡ залпы яңғыраны. Яугирҙәрҙең йәне тыныслыҡ тапһын, ғәрәсәтле һуғыш, унда һәләк булған батырҙар тураһындағы иҫтәлектәр мәңге һаҡланһын ине.

Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы менән осрашҡан һайын уның рухи байлығына һоҡланам. Аҙ һүҙле, тыныс, итәғәтле, тәрән аҡыллы шәхес бик мөһим һәм кәрәкле эш - Тыуған илебеҙ хаҡына ғүмерен фиҙа ҡылған һалдаттар исемен асыҡлау, мәңгеләштереү менән шөғөлләнә, өҫтәүенә, яҡындарын да ылыҡтыра. Эҙләнеү эше ял итеү мөмкинлегенән мәхрүм итһә лә, йорт мәшәҡәттәрен хәстәрләүҙе ситкә ҡуйырға мәжбүр итеп, ғаиләгә финанс яҡтан сығымдар килтерһә лә, ул бик әһәмиәтле һәм рухи-әхләҡи ҡәнәғәтлек килтергән изге ғәмәл. Яныбыҙҙа үҫеп килеүсе быуынды үҙ өлгөһөндә патриотик рухта тәрбиәләгән ошондай һоҡланғыс кешеләр булыуы ғорурландыра. Хөрмәтле Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы, барыһы исеменән дә һеҙгә рәхмәт белдерәбеҙ, ҡылған изгелегегеҙ үҙегеҙгә меңләтә әйләнеп ҡайтһын.

*Ветерандар ойошмалары*

# Күберәк анык эштәр башкарырға

***Шаршамбы көн район Мәҙәниәт йортонда һуғыш, хеҙмәт, Ҡоралы Көстәр һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары район ветерандар советының отчет-һайлау конференцияһы үтте.***

***Унда район хакимиәте башлығы Ф.З.Туҡтаров, БР хәрби комиссариатының Миәкә һәм Стәрлебаш райондары бүлеге начальнигы Р.А.Латипов ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Сараға депутаттарҙан тыш, ауыл биләмәләре башлыҡтары, район үҙәгенең бер нисә учреждениеһы һәм ойошмаһы етәкселәре саҡырылғайны. Улар арабыҙҙан киткән һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарын, локаль һуғыштарҙа ҡатнашыусыларҙы һәм чернобылселәрҙе бер минут тын тороп иҫкә алды.***

---

***Рәйсә МУСИНА.***
***Автор фотоһы.***



Район ветерандар советы рәйесе Кәлимулла Шәрәфетдинов һуңғы биш йылда район ветерандар ойошмалары эше тураһында ентекле доклад менән сығыш яһаны. Уларҙың эшмәкәрлеге, тәү сиратта, оло йәштәгеләрҙең көнүҙәк проблемаларын хәл итеүгә, уларҙың мәнфәғәттәрен яҡлауға йүнәлтелде, тип билдәләне ул.

Ошо биш йылда Бөйөк Еңеү байрамдарына арналған бихисап саралар үткәрелгән. 115 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙың тол ҡатындары торлаҡ һатып алыуға һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға сертификаттар алған, тағы ла 49 кешегә документтар әҙерләнгән. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын байрам итеүгә ҙур эш алып барыла. Ошо әһәмиәтле датаға ярашлы, тыл хеҙмәтсәндәренең хеҙмәт батырлығын мәңгеләштереү өсөн ошо геройҙарға һәйкәл ҡуйырға тәҡдим итте ул.

Шулай уҡ өлкән быуын вәкилдәре ҡатнашҡан мәҙәни-спорт саралары, уларҙың ниндәй әүҙем һәм хәл-ваҡиғаларға бай тормош менән йәшәүҙәре, йәштәргә хәрби-патриотик тәрбиә биреүгә тос өлөш индереүҙәре тураһында һөйләне. Ә айырым ветерандар, мәҫәлән, Мансур Сөйәрғолов (Ҡабыҡҡыуыш ауылы) һәм Валерий Мәжитов (Стәрлебаш) республика, Рәсәй спорт ярыштарында һәм хатта донъя чемпионаттарында ҡатнашып, уларҙа еңеп, районыбыҙҙың данын күтәрә, тине ул.

Өлкән быуын кешеләре шулай уҡ ауылдарҙы, зыяраттарҙы, шишмәләрҙе төҙөкләндереүҙә әүҙем ҡатнаша. Ветерандар ойошмаһы ветерандарҙы сәләмәтләндереүҙе айырыуса контролдә тота. Йыл һайын уларға диспансерлаштырыу үткәрелә, дауаланыуға мохтаждары Өфө ҡала госпиталенә ебәрелә.

Хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусылар, чернобылселәр менән эшләгәндә уларға социаль һәм медицина ярҙамы күрһәтеүгә ҙур иғтибар бирелде.

> ***2014 йылда социаль страховкалау фонды аша шифаханаларҙа 30 ветеран, ә «Социаль туризм» программаһы буйынса 136 кеше сәләмәтлеген нығытҡан, 285 кеше өлкән йәштәгеләрҙең халыҡ университетында белем алып, компьютер менән ҡулланырға өйрәнгән.***

Башҡа төрлө бихисап файҙалы эштәр ҙә башҡарылды. Район һәм ауыл биләмәләре хакимиәттәре, төрлө хеҙмәт етәкселәре һәм белгестәре был йәһәттән төрлө яҡлап ярҙам күрһәтте.

Кәлимулла Хәйрулла улы проблемаларға һәм етешһеҙлектәргә лә туҡталып үтте. Хәрби хәрәкәттәр ветерандарын эшкә урынлаштырыуы ауыр булыуы, эш урындары етешмәүе, хеҙмәт хаҡы түбән булғанлыҡтан эшкә яраҡлы граждандарҙың сит тарафтарға эш эҙләп китеүе, юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙың тыуған районына эшкә ҡайтырға теләмәүе сәбәпле бер нисә тиҫтә йылдан ауылдарҙа белгес-аграрсыларҙың бөтөнләй ҡалмаясағы тураһында һөйләне ул.

Шулай уҡ алкоголь генә түгел, наркотик матдәләрҙе лә күпләп ҡулланыу осраҡтары йышайыуын, ҡайһы бер ата-әсәләрҙең үҙ бурыстарын тейешенсә үтәмәүен, тимәк, граждандарҙы тәрбиәләү менән шөғөлләнгән йәмәғәт ойошмаларын, иптәштәр судтарын тергеҙеү кәрәклеген билдәләп үтте Кәлимулла Шәрәфетдинов.

Ветерандарға балаларға әхлаҡи һәм патриотик тәрбиә биреүгә бәйле эштәрҙә һәм сараларҙа тағы ла әүҙемерәк ҡатнашырға кәрәк. Бының өсөн уникаль материалдар тупланған музейҙарҙың мөмкинлектәренән тулыраҡ файҙаланыу зарур. Ветерандарҙы конституцион һәм социаль хоҡуҡ йәһәтенән яҡлау, уларҙың көнкүреш проблемаларын хәл итеүҙә ярҙам күрһәтеү, медицина, шифахана-курорт хеҙмәтләндереүен һәм дарыуҙар менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу буйынса район ветерандар советының яңы составы алдында ҙур бурыстар тора, тине ул.

Конференция аҙағында К.Х.Шәрәфетдинов йыйылыусыларҙы 13 сентябрҙә урындағы Советтарға депутаттар һайлауҙа ҡатнашырға саҡырҙы.

Һуңынан конференция буйынса фекер алышыуҙа башланғыс ветерандар ойошмалары рәйестәре уларҙа пенсионерҙар менән эштең нисек ойошторолоуы тураһында һөйләне. - Ветерандарыбыҙға ҙур хөрмәт һәм иғтибар күрһәтелә, уларға байрамдарҙа бихисап төрлө түләүҙәр бирелә, тине Зөлфиә Хөббөтдинова (район элемтә узелы). Закира Ғиззәтуллина (башланғыс мәктәп) юбилярҙарға хөрмәт күрһәтелеүе һәм уларҙың мәктәп етәкселеге менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеүҙәре, Мансур Һөйәрембәтов (Ҡабыҡҡыуыш) - Бөйөк Ватан һуғышы тураһында дөрөҫлөктө боҙоуға юл ҡуймау, Рәфис Ишморатов (запастағы офицерҙар ойошмаһы) - патриотик тәрбиә биреүҙе яҡшыртыу тураһында һөйләне. Ә Әлфира Ғатауллина (Йәшергән ауылы) ауырлыҡтар булыуға ҡарамаҫтан ауылдың йәшәүен, балалар тәрбиәләү эшендә күберәк тик изгелеккә өндәүсе дингә таянырға кәрәклеген билдәләне. Күберәк аныҡ эштәр башҡарырға, ветерандарға ҙур иғтибар бирергә кәрәк, тине район мәғариф бүлегенән Владимир Ғәлиев. Йәлембәт ауылынан билдәле эҙләнеүсе Ғәйнетдин Ҡыҙрасов һуңғы йылдарҙа алып барған эҙләнеү эштәре тураһында һөйләне, ә БР хәрби комиссариатының Миәкә һәм Стәрлебаш райондары бүлеге начальнигы Ринат Латипов йәштәрҙе тәрбиәләүгә тос өлөш индергәндәре өсөн ветерандарҙың барыһына ла ихлас күңелдән рәхмәт белдерҙе.

Район хакимиәте башлығы Фәнүр Туҡтаров конференцияға йомғаҡ яһаны. Районда Бөйөк Еңеүҙе байрам итеүгә ниндәй эштәр башҡарылыуы тураһында ҡыҫҡаса һөйләгәндән һуң, ул әүҙем тормош позицияһы һәм йәштәргә патриотик тәрбиә биргән өсөн Мансур Һөйәрембәтов һәм Ғәйнетдин Ҡыҙрасовтарға **(һүрәттә)** район хакимиәтенең Рәхмәт хаттарын тапшырҙы.

***

Делегаттар район ветерандар советы рәйесе итеп йәнә Кәлимулла Шәрәфетдиновты һайланы.

Һуғыш шаңдауы

# Һәләк булғандар онотолмай

**Эҙәрмәндәр Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы иҫтәлекте һаҡлай. Улар араһында Йәлембәт ауылынан яҡташыбыҙ Ғәйнетдин Ҡыҙрасов та бар.**

*Рәйсә МУСИНА.*

*Фотолар Ғ.Ҡыҙрасовтың ғаилә альбомынан.*

Үткән йәй ул ейәнсәрҙәре Лилиә, Гүзәлиә һәм ейәне Наил менән сираттағы тапҡыр Псков өлкәһендә ошо урындарҙа һәләк булған һалдаттарҙың ҡалдыҡтарын эҙләү һәм уларҙы яңынан ерләү менән шөғөлләнде. Турки-Перевоз ауылынан алыҫ булмаған урындарҙа ҡаҙыу эштәрендә ҡатнаштылар. Ун көндә Башҡортостан, Ҡаҙағстан, Татарстан, Латвия, Петербург эҙәрмәндәренең берҙәм тырышлығы менән 120 һалдат ҡалдығы табыла, шуларҙың өсөһөнөң шәхесе асыҡланып, улар тураһында туғандарына хәбәр ителә.



Эҙәрмәндәрҙең тапҡан әйберҙәре



Иҫтәлеккә фото

18 августа Турки-Перевоз ауылынан алыҫ булмаған билдәле мемориаль территорияһында һалдаттар ҡабаттан ерләнә. Митингта урындағы хакимиәт, хәрби комиссариат вәкилдәре, эҙәрмәндәр отрядтары командирҙары сығыш яһай. Иң яҡшы эҙәрмәндәргә Маҡтау грамоталары һәм Рәхмәт хаттары тапшырыла. Траур музыкаһы яңғырай, йыназа уҡыла, хәрбиҙәр мылтыҡтан өс тапҡыр һауаға атҡас, һалдаттарҙың ҡалдыҡтары ер ҡуйынына тапшырыла.

... Ерҙә һаман да гильзалар һәм снарядтар, урмандарҙа - илебеҙҙе фашист илбаҫарҙарынан һаҡлаған һалдаттарҙың һөйәктәре ята, тимәк, эҙәрмәндәрҙең бихисап эше бар әле һәм Ғәйнетдин Сәрүәретдин улы быйыл йәй йәнә алыҫ юлға сығасаҡ. Ул Псков өлкәһенә барырға ярҙам иткәне өсөн район хакимиәте башлығы Ф.З.Туҡтаровҡа ҙур рәхмәт белдерә.

# БЛАГОДАРСТВЕННОЕ ПИСЬМО

**Администрация Невельского района**
**НАГРАЖДАЕТ**

**КИДРЯЧОВА**
**ГАЙНЕТДИНА**
**САРВАРЕТДИНОВИЧА**

**поисковый отряд «Гвоздика»**
**Невельского района**

**За активное участие в «Вахте памяти - 2015» на территории Невельского района Псковской области, большой вклад в работу по увековечиванию памяти воинов, погибших в годы Великой Отечественной войны 1941 – 1945 годов**

**Глава Невельского района** **А.Ю.Ващенков**

**17 августа 2015 года**
**г.Невель**

ПСКОВСКАЯ ОБЛАСТНАЯ ВОЕННО-ПАТРИОТИЧЕСКАЯ
ПОИСКОВАЯ ОБЩЕСТВЕННАЯ ОРГАНИЗАЦИЯ
«СЛЕД «ПАНТЕРЫ»

# ГРАМОТА

*За активное участие в проведении международной
молодёжной «Вахты Памяти – 2015»
по установлению имён погибших
и судеб пропавших без вести военнослужащих
периода Великой Отечественной войны
на территории Невельского района Псковской области*

**награждается**

# КИДРЯЧЁВ

## Гайнетдин Сарваретдинович

*Руководитель ВППОО
«След «Пантеры»* Г.В. Корольков

*2015 год
г. Псков*

# Благодарственное письмо

*Ветерану труда,*
*участнику поисковых отрядов*

*Кидрячеву Г.С.*

*Уважаемый Гайнетдин Сарваретдинович!*

*Выражаем Вам искреннюю благодарность за постоянную активную работу по патриотическому воспитанию молодежи и граждан муниципального района Стерлибашевский район Республики Башкортостан.*

*Желаем Вам крепкого здоровья, благополучия и дальнейших успехов во всех добрых делах и начинаниях.*

*Глава Администрации*
*муниципального района*
*Стерлибашевский район*
*Республики Башкортостан* — *Ф.З. Туктаров*

*март 2015 года*

**ПСКОВСКАЯ ОБЛАСТНАЯ ВОЕННО-ПАТРИОТИЧЕСКАЯ ПОИСКОВАЯ ОБЩЕСТВЕННАЯ ОРГАНИЗАЦИЯ «СЛЕД «ПАНТЕРЫ»**

*награждает*

***Кидрячева***

***Гайнетдина Гарваретдиновича***

*за активное участие*

***в ВАХТЕ ПАМЯТИ – 2016***

*и военно-патриотическое воспитание молодежи*

«След «Пантеры»

*август 2016*


Турки-Перевоз
ПОИСКОВЫЙ ОТРЯД
ГВОЗДИКА
ПОИСКОВЫЙ ОТРЯД
ПАТРИОТ 60 Г.НЕВЕЛЬ
Псковская обл.
Невельский район
2016 г.


ПОИСКОВЫЙ ОТРЯД
ГВОЗДИКА
ВАХТА
ПАМЯТИ
2016
ПОИСКОВЫЙ ОТРЯД
ПАТРИОТ 60
ОТЕЧЕСТВЕННАЯ ВОЙНА